**ИМАН ЮЛЫНДА ХӘЙБУЛЛА,**

**МӨНӘЖӘТ**

Һикһән биш йыл. Әҙме елдәр иҫкәндер.
Дауыл булып,күпме йылдар үткәндер.
Бирешмәгән үткән йылдарға быуын.
Был көнгә килеп еткән ерем һыуым.

Ямғыр яуған далаһына болоттан.
Икмәк үҫкән. Еләк йыйған болондан.
Күпме быуын килеп еткән иректән,
Ошо ерҙә билен бөккән, ерекkән.

Мираҫ әйткән балаға, ата баба,
Ер һыуым һиңә ҡала, сикһеҙ дала.
Еӊ һыҫғанып үҫтер бала игенен.
Эшләгәнгә бирә Алла икмәген.

Ҡымыҙ эскән, ғүмер иткән йәйләүҙә.
Малын көткән йөрөгән ул йәйәүҙә.
Һунар йөрөп бүре тотҡан урмандан.
Һаулыҡ булған өйөн һалған самандан.

Ололарҙың фатихаһын тотайыҡ.
Һикһән биш йыл үтһәлә онотмайыҡ.
Тыуған яҡтың ер һыуын бысратмайыҡ.
Урамдарҙа таҙалыҡ булдырайыҡ.

Таҙа булһын Алла биргән тәбиғәт.
Иманлыҡта таҙа булыу ҙа кәрәк.

Аҡһаҡалдар әйтеүен тик үтәйек
Күңелдәге сафлыҡҡа беҙ етәйек.

Сафлығыңды һаҡла тип әйт ҡыҙыңа.
Араҡы, тәмәкене тый улыңа.
Әшәке һүҙ гонаһ һүҙе бел балам.
Аҙашҡанһың, көтә иманың Аллам.

Аҡьярымда, доға йорто кәрәк бит.
Йәше ҡарты тапһын уны кәрәк тип.
Хәләл тейеп итен һатты магазин.
Хәмер шешәләре тулды, ҡайҙа дин.

Ике йөҙлөлек баҫты, бел халыҡты,
Аҡьяр тибеҙ, ауылды ҡара яҡты.
Йәш быуынға эсерәбеҙ хәмерен
Һыра, араҡы, вино, самагонын.

Хөкөмәтебеҙ уяу бирә әмер,
Наркотикты ҡулланма эсмә хәмер.
Ни әйтәһең ҡалды был тик ҡағыҙҙа.
Тәмәкене көйрәтә ҡатын ҡыҙҙа.

Юлын әйтәм. Аллаға кил гонаһлы
Тәүбәгә кил, булыр күңелең сафлы.
Гонаһһыҙ кешеләр юҡ был доньяла
Иманға кил, иманһыҙ тыуа бала

Был  мөнәжәт  әйтәм  хәйбуллаларға.

Килегеҙ  иман  итегеҙ  Аллаға.

Алла  Һүҙен  еткерәмен  халҡыма.

Хоҙайымды  йөрәгеңә  ал  ғына

Тәңрем  Һүҙе  йөрәгеңде үҙгәртер.

Кисерелеү  тик  Минән,  тейеп  әйтер.

Уҡы  Һүҙен,  доғаңды  ҡыл  уҙаман,

Килде  Ереңә  ахры  заман.

Урамдарҙа  Алла  Һүҙен  һөйләйем,

Аллам  бирә  йырында  мин  көйләйем.

Күрһә  мине  туҡтатһын  һәр  үткенсе.

Ғәфү  итте  мине  Алла  Бәрәсе.